# II быуын Федераль дәүләт дөйөм белем биреү стандартының төп положениеларының береhе – универсаль укыу эшмәкәрлеге формалаштырыу



термин уҡый белеүҙе йәғни субъекттың яңы
әжрибәне аңлы һәм актив рәүештә
еүе һөҙөмтәһендә үҙ-үҙен үҫтереүгә һәм
тырыуға һәләтлеген аңлата. Мәктәп
нда универсаль уҡыу эшмәкәрлеге – ул уҡыу-уҡытыу процесында уҡыусыларҙа белем алыуға ынғай мотивация булдырыу аша яңы белем, күнекмә һәм компетенцияларҙы үҙ аллы уңышлы үҙләштереү, йәғни уҡый белеү мөмкинлеген биреүсе дөйөмләштерелгән эшмәкәрлек. Был эшмәкәрлек уҡыусы тарафынан социаль тәжрибәне аңлы һәм актив рәүештә үҙләштереү һөҙөмтәһендә формалаша. Шуға ла белем биреү системаһының кимәтти ориентирҙарының береһе булып уҡыусыларҙы үҙ аллы уҡыу эшмәкәрлеген ойошторорға өйрәтеү (планлаштырыу, контроль, баһалау) тора.

# Универсаль укыу эшмәкәрлеге төрҙәре дүрт блокка бүленә:

- шәхси;
- регулятив;
- танып белеү;
- коммуникатив.

## *Шәхси эшмәкәрлек*

Уҡыусының эске шәхси позицияһын, мәғәнәүи-ҡиммәтле йүнәлеш алыуын (әхлаҡи нормаларҙы белеү, үҙ ҡылыҡтарыңдың дөйөм ҡабул ителгән этик принциптар менән тап килеү - килмәүен билдәләй алыу, ҡылыҡтың әхлаҡи аспектын айырыу) һәм ижтимағи ролдәрҙә, шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙә дөрөҫ йүнәлеш алыуын тәьмин итә.



# *Регулятив* (көйләүсе)

универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә уҡыу процесын һәм дәрестән тыш эшмәкәрлекте ойоштороу өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыусы эш төрҙәре карай:

- уҡытыусы ярҙамы менән дәрестәге эшмәкәрлектең маҡсатын билдәләү һәм формалаштырыу (элек өйрәнелгән һәм таныш булғанды әлегә тиклем таныш булмаған менән тап килтереп, сағыштырып, уҡыу мәсьәләһен билдәләй белеү);





- планлаштырыу (төп һөҙөмтәне күҙҙә тотоп, маҡсаттарҙың эҙмә-эҙлелеген асыҡлау; план төҙөү һәм эш төрҙәренең тәртибен билдәләү);

- прогнозлау (һөҙөмтәне һәм белемде үҙләштереү кимәлен алдан күҙаллау);

- контроль (эшмәкәрлек ысулының һәм уның һөҙөмтәһенең билдәләнгән эталонға тап килеү-килмәүен асыҡлау);




- төҙәтмәләр индереү (эталондан тайпылыштар булған осраҡта, планға һәм эшмәкәрлек ысулына өҫтәмәләр һәм төҙәтмәләр индереү);

- **баһалау (таныштан әлегәсә таныш булмағандан айыра белеү; үҙләштерелгәндең сифатын һәм кимәлен билдәләй алыу);**



- **үҙ-үҙеңде көйләү (үҙ көсөңдө, энергияңды, ихтыяр көсөңдө туплап, ауырлыктарҙы еңеп сығыу).**

**Танып белеү**

блогына дөйөм уҡыу (өйрәнеү, белем алыу) эшмәкәрлегә, логик эшмәкәрлек, шулай уҡ проблеманы ҡуйыу һәм хәл итеү инә:



- дәреслек менән эш итә белеү (унының төҙөлөшө, йөкмәткеһе шартлы тамғалары һ.б.);

- текст һәм иллюстрациялар аҙағындағы һорауҙарға яуап биреү;



- класс һәм уҡытыусы менән берҙәм эш һөҙөмтәләре буйынса һығымталар яһау;



- мәғлүмәтте бер формаһан икенсе формаға күсереү; уҡылған ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен тулы һөйләү һ. б.

**_Коммуникатив_ эшмәкәрлек** социаль компетентлыкты, аралашыусы һәм хеҙмәттәш партнерҙар позицияһын иҫәпкә ала, башҡаларҙы тыңлай һәм диалогка инә белеүҙе, проблемаларҙы коллектив менән хәл итеүҙә ҡатнашыуҙы, тиҫтерҙәрең һәм өлкәндәр менән продуктив хеҙмәттәшлек ойоштора белеүҙе тәьмин итә.



Универсаль уҡыу эшмәкәрлегенең ҡарап үтелгән төрҙәре айырым-айырым түгел, ә уҡыу программаһындағы һәр дисциплинаны үҙләштереү барышында комплекслы, системалы үҫтерелергә тейеш.



Һәр дәрестә үçтереүсе уҡыу-уҡытыу системаларында киң ҡулланылған **уңыш ситуацияһы** тыуҙырыу, уҡыусылар алдына еңеп сығыуҙан ҡәнәғәтләнеү алырлыҡ проблемалар ҡуйыу, әҙәби күренештәрҙе сағыштырма анализлау, дөйөмләштереү, һығымталар яһау, моделдәр һәм һыҙмалар төҙөү кеүек метод һәм алымдар ҡулланып, бөтә класс менән, микротөркөмдәрҙә һәм парталағы ике уҡыусы араһында хеҙмәттәшлек ойоштороу маҡсатҡа ярашлы.


